**9 класс**
**Контроль диктант**
**1 сирек**

Исем серҙәре.

Кешенең исеме менән холҡо,яҙмышы араһында ниндәйҙер бәйләнеш барлығын боронғолар һиҙемләгән. Кешенең исеме уның үҙе тураһында күп нәмәләр һөйләй икән.

Кешенең исемен үҙгәртеп, уның яҙмышын да үҙгәртергә була, тигән ҡараш бар. Мәҫәлән, римдар, яҙмыштары ниндәйҙер икенсе боролош алһын өсөн, исемдәрен баш түбән әйләндерелгән хәрефтәр менән яҙгандар.

Чикаго табиптары раҫлауынса, исемдең кеше тормошона йоғонтоһо бик ҙур. Әгәр ул көлкөлө икән, кешенең бәләкәйҙән үк ҡаршы тороу позицияһына ҡуя. Бала үҙенә һәйбәт мөнәсәбәт өсөн көрәшергә тейеш була, һәм был уның холҡонда, психикаһында сағылыш таба. Инглиз терапевы Т. Уэстон билдәләүенсә, сәйер исемле кешеләр төрлө психик кәмселектәрҙән башҡаларға ҡарағанда йышыраҡ яфаланалар.

**2.Һүҙҙәр менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ**

Болот, бал,он,был,эт, балалар,күҙ,көндәр.

**3. Һөйләмдең баш киҫәктәренең аҫтына һыҙығыҙ.**

Ҡыҙарып ҡояш сығып килә. Күк томан күтәрелә.

---

Класс : 9, дата _____________2 сирек

**Матурлыҡ.**

Кешенең эске һәм тышҡы матурлығы була.Әммә уның нигеҙендә сәләмәтлек ята.Шуға ла йәштән үк гигиена талаптарын теүәл үтәргә кәрәк.

Һәр иртәне гимнастиканан башлау,һалҡын һыу менән йыуыныу,тәнде ҡаты таҫтамал менән ышҡыу көндәлек ҡағиҙәгә әйләнергә тейеш.Ундай кеше грипп ,ангина менән ауырымай,эшкә һәләтлеге арта,кәйефе лә була.

Битеңде генә түгел,муйынынды ла,ҡолаҡтаҙы ла һабынлап йыуырға оноторға ярамай.Мәктәптән ҡайтып,урамда уйнап кергәс,ҡулдарҙы һабынлап йыйырға кәрәк.Был кешенең тәрбиәлелеген күрһәтә.

Тештәр тураһында айырым әйтергә мөмкин. Тештәрҙе иртәле-кисле һәм ашағандан һуң паста йәки порошок менән ентекләп таҙартырға кәрәк.

Тештәргә ҡыҫылып ҡалған аҙыҡ микробтар өсөн бик уңайлы,һәм улар бик тиҙ үрсеп китәләр.

а)Текста әйтелгән тән өлөштөрен күсереп яҙырға.

9 класс
3 сирек өсөн контроль диктант
Минең әсәйем.

Ер йөҙөндә күпме генә әсә булмаһын, һәр кешегә үҙ әсәһе һәйбәт һәм матур тойола. Шулай булырға тейеш тә инде.

Әсәй! Минең һөйөклө әсәкәйем! Һиңә ниндәй генә матур, иркә, йылы һүҙҙәр әйтһәм дә, аҙ булыр: улар йөрәгемдәге иң-иң нескә тойғоларымды асып еткерә алмаҫ кеүек.

Әсәкәйем! Бер- генәм! Күк йөҙөндәге яҡты ҡояшҡа тиңләйем һине. Меҙ-мең рәхмәттәр уҡыйым.

Ауыр ваҡыттарҙа таяныс эҙләп тә, урғылып торған шатлыҡтарымды уртаҡлашырға ла һиңә йүгереп киләм, иң яҡын кешем һин, әсәй. һәр ваҡыт мине аңлайһың, дөрөҫ юл өйрәтәһең.

Әлбиттә, һине рәнйеткән саҡтарым да булғандыр. Бөтәһе өсөн дә ғәфү ит, әсәйем. Киләсәктә һинең йөҙөңә бер ваҡытта ла ҡыҙыллыҡ килтермәм! (100 һүҙ.)

9 класс

4 сирек өсөн контроль күсереп яҙыу

# ШӘЖӘРӘ

Шәжәрә — ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән. Шәжәрәгә ырыуҙың ирҙәр исеме генә индерелгән һәм уларҙы иҫтә тотоу талап ителгән. Нәҫел-ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән.

Үҙеңдең шәжәрәңде белеү ғәҙәте башҡорттарҙа бик борондан һаҡланып килгән, элек 7 быуыныңды белеү ғәҙәти хәл булған. Хатта ата-бабаларын 10—12 быуынға тиклем белеүселәр бар.

Ергә яҙ килде. Ҡар ирей, гөрләүектәр аға, йылғалар таша, боҙҙар китә. Беҙ яҙ матурлығын йәшеллектә, ҡоштар моңонда, сәскәләрҙә күрәбеҙ. Иң беренсе булып үгәй инә үләне сәскәләнә.Унан умырзая ҡыуандыра.

Яҙҙың тәүге сәскәләре бик күп: баллыҡай, күк умырзая, кәкүк емеше, кәзә һаҡалы, сибәркәй,

ҡарлуғас үләне,ҡаҙ йыуаһы, һары умырзая. Был сәскәләр йылдан-йыл аҙая бара. Сәскә атҡанда кешеләр уларҙы самаһыҙ күпләп йыя, тәбиғәттең йәмен ебәрә.

Һүҙҙәрҙе тәржемә ит: яҙ килде, ҡар ирей,гөрләүектәр аға, йылғалар таша, яҙ матурлығы,боҙ китә, ҡоштар моңо, үгәй инә үләне